**Муниципальное общеобразовательное бюджетное учреждение**
**средняя общеобразовательная школа с. Еланлино**
**муниципального района Кигинский район РБ**

| РАССМОТРЕНО | СОГЛАСОВАНО | УТВЕРЖДЕНО |
|---|---|---|
| Руководитель ШМО учителей гуманитарного цикла<br>______________<br>Шарафутдинова Г.Л..<br>Протокол № 5<br>от «31» 05 2023 г. | заместитель директора по УВР МОБУ СОШ с.Еланлино МР Кигинский район РБ<br>______________<br>Шарафутдинова Г.Л. | директор МОБУ СОШ с.Еланлино МР Кигинский район РБ<br>______________<br>Шаихова Р.Р.<br>Приказ № 229<br>от «01» 09 2023 г. |

# РАБОЧАЯ ПРОГРАММА ОСНОВНОГО ОБЩЕГО ОБРАЗОВАНИЯ УЧИТЕЛЯ БАШКИРСКОГО ЯЗЫКА И ЛИТЕРАТУРЫ ШАИХОВОЙ ЛЮДМИЛЫ НАБИУЛЛАЕВНЫ НА 2023-2028 УЧЕБНЫЙ ГОД

| Класс | Учебная деятельность | Количество часов в неделю | УМК |
|---|---|---|---|
| 5-9 | Башкирский язык | 1 | Башкирский язык для 5-9 классов, (авторы: Тулумбаев Х. А., Давлетшина М.С., Габитова З. М., Усманова М. Г. - Уфа: «Китап», 2020. |

с. Еланлино – 2023 г.

**Аңлатма яҙыу.**

5-9-сы кластар өсөн башҡорт теленән эш программаһы.

Эш программаһы түбәндәге норматив-хоҡуҡи документтарға нигеҙләнеп төҙөлгән:

1. Рәсәй Федерацияһының “Рәсәй Федерацияһында Мәғариф тураһында” Федераль законы, 29.12.2012 № 273-ФЗ;

2.Төп дөйөм белем биреү федераль дәүләт стандарттарының, Рәсәй Федерацияһы мәғариф һәм фән министрлығы бойороғо менән раҫланған приказы, 17.12.2010 й. №1897 (в ред. от 29.12.2014 Рәсәй Федерацияһы мәғариф һәм фән министрлығы приказы № 1644, баш. 31.12.2015 №1577);

3.Ҡулланыусылар хоҡуҡтарын яҡлау һәм кеше именлеге өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең һәм Рәсәй Федерацияһы баш дәүләт санитар табибы менән 29.12.2010 №189 «СанПиН 2.4.2.2821-10» тураһында раҫлау ҡарары. « Дөйөм белем биреү учреждениеларындағы уҡыу шарттарында санитар-эпидемиологик талаптар » (в ред. Үҙгәрештәр N 1, РФ баш дәүләт санитар табибы ҡарары менән раҫланған 29.06.2011 N 85 , N 2 Үҙгәреш, РФ баш дәүләт санитар табибы ҡарары менән раҫланған 25.12.2013 N 72, N 3 Үҙгәреш, РФ баш дәүләт санитар табибы ҡарары менән раҫланған 24.11.2015 N 81 , 22.05.2019 N 8);

4. Рәсәй Федерацияһы Мәғариф һәм Фән министрлығы тарафынан башланғыс, дөйөм, төп дөйөм, урта дөйөм белем биреү учреждениеларына тәҡдим ителгән федераль дәреслектәр исемлеге 28.12. 2018 №345 бойороғо менән раҫланған;

5.Рәсәй Федерацияһы Мәғариф һәм Фән министрлығы тарафынан башланғыс, дөйөм, төп дөйөм, урта дөйөм белем биреү учреждениеларына тәҡдим ителгән федераль дәреслектәр исемлегенә 08.05.2019 №233 һәм 28.11.2019 № 632 бойороғо менән үҙгәртеүҙәр индерелгән;

6.Башҡортостан Республикаһының ”Башҡортостан Республикаһының Мәғариф тураһында” законы 01.07.2013 №696-З

7. ”Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында” законы 25 октябрь 1991 №1807-1 (24.07.98, 11.12.2002 йыл үҙгәртелгән).

8. ”Башҡортостан халыҡтары телдәре тураһында” законы 15.02.1999 йыл №216-З.

9 . Башҡортостан Республикаһында Милли мәғарифты үҫтереү концепцияһы 31.12.2009 йыл №УП-730

9. Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан раҫланған ”Башҡорт теленән (дәүләт теле) программа.” (Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 5-9 кластары өсөн). Төҙөүсеһе : Ғабитова З.М.–Өфө, 2017 йыл.

10. Башҡортостан Республикаһы Ҡыйғы районы муниципаль районы, Йыланлы ауылы муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһының “Уҡыу планы “2023-2024 йыл.

**Программа үҙенсәлектәренең характеристикаһы:**
- Эш программаһы Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан раҫланған ”Башҡорт теленән (дәүләт теле) программа” (Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 5-9 кластары өсөн) нигеҙ:ендә төҙөлдө.Төҙөүсеһе : Ғабитова З.М.– Өфө, 2017 йыл.

Башҡорт теле : Уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 5-се класы өсөн башҡорт телен (дәүләт теле булараҡ) өйрәнеү өсөн уҡыу ҡулланмаһы. – 2-се баҫма/ З.М.Ғәбитова, М.Ғ.Усманова.- Өфө: Китап, 2017.
Уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 6-сы класы өсөн башҡорт телен (дәүләт теле булараҡ) өйрәнеү өсөн уҡыу ҡулланмаһы. – 2-се баҫма/ З.М.Ғәбитова, М.Ғ.Усманова.- Өфө: Китап, 2017.
Уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 7-се класы өсөн башҡорт телен (дәүләт теле булараҡ) өйрәнеү өсөн уҡыу ҡулланмаһы. – 2-се баҫма/ З.М.Ғәбитова, М.Ғ.Усманова.- Өфө: Китап, 2017.
Уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 8-се класы өсөн башҡорт телен (дәүләт теле булараҡ) өйрәнеү өсөн уҡыу ҡулланмаһы. – 2-се баҫма/ З.М.Ғәбитова, М.Ғ.Усманова.- Өфө: Китап, 2017.
Уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 9-сы класы өсөн башҡорт телен (дәүләт теле булараҡ) өйрәнеү өсөн уҡыу ҡулланмаһы. – 2-се баҫма/ З.М.Ғәбитова, М.Ғ.Усманова.- Өфө: Китап, 2017.

**Предметтың уҡыу планындағы урыны.**
Башҡорт теле предметы 5-9 класта база кимәлендә өйрәнелә. Мәктәптең уҡыу планында предметҡа 5-9 кластарҙа аҙнаһына 1сәғәт бүленгән, йылына 35 сәғәт тура килә.

**Уҡыу предметын, курсын үҙләштереүҙә планлаштырылған һөҙөмтәләр**

**/Планируемые результаты изучения учебного предмета/**

5-9 кластарҙа шәхсән, предмет-ара һәм предмет һөҙөмтәләре

/ Личностные, метапредметные, предметные результаты освоения учебного предмета в конце 5-9 классов/

**Шәхсән һөҙөмтәләр** (мәктәп уҡыусыларының башҡорт теленән төп программаны үҙләштереүе);

- Башҡортостан Республикаһында башҡорт теленең дәүләт теле булыуын аңлау: башҡорт телен өйрәнеүҙең эшмәкәрлек һәм профессиональ эшмәкәрлектә кәрәкле булыуын аңлау;

- башҡорт телен ғәмәлдә ҡулланыуға әҙерлек: үҙ-ара аралашыуҙа толерантлыҡ;

- башҡорт теленең башҡорт мәҙәниәте менән танышыу сараһы булыуын аңлау.

**Метапредмет һөҙөмтәләр** (рус телле мәктәптәрҙә башҡорт телен өйрәнеү):

- телдән һәм яҙма хәбәр ителгән мәғлүмәтте адекват ҡабул итеү;

- төрлө стилдәге һәм жанрҙағы тексты төрлө уҡыу төрҙәрендә ҡабул итеү;

- тыңланған һәм уҡылған тексты бирелгән эш төрҙәре (план, йөкмәткеһен һөйләү, конспект) менән яңынан һөйләй белеү;

- аралашыу сфераһы һәм шартына ҡарап, телмәреңде һәм яҙма телмәреңде төҙөй белеү, әңгәмә, фекер алышыу, дискуссияла ҡатнаша алыу;

- үҙ аллы белем ала белеү, төрлө мәғлүмәт сығанаҡтары, интернет ресурстары, ваҡытлы матбуғат баҫмалары менән эшләй белеү; белешмә әҙәбиәт менән ҡуллана алыу;

- тәғәйен темаға материалды һайлап ала һәм системаға килтереү ысулдарын үҙләштереү; үҙ ҡарашыңды анализлай, сағыштыра, күрһәтә, һығымта яһай, йомғаҡлай, нигеҙләй белеү;

- башҡорт телен башҡа сығанаҡтарҙан мәғлүмәт алыу сараһы булараҡ ҡуллана алыу һәләтен үҫтереү;

- үҙ телмәрендә баһалау күнекмәләрен үҙләштереү;

- предмет-ара кимәлдә (туған тел, сит тел, әҙәбиәт) тел күренештәрен анализлай белеү.

**Предмет һөҙөмтәләре** (сығарылыш класс уҡыусыларының төп мәктәп программаһын үҙләштереүе):

- төп аңлатмаларҙы үҙләштереү: тел һәм телмәр, телдән һәм яҙма телмәр, диалог һәм монолог, телмәр ситуацияһы, телмәрҙең функциональ стилдәре һәм типтары, текст; телдең системаһы: фонетика, орфоэпия, лексика һәм фразеология, һүҙ составы һәм һүҙьяһалыш, морфология, синтаксис, орфография һәм пунктуация;

- башҡорт теленең телмәр берәмектәрен белеү, уларҙың билдәләре, һүҙ,

һүҙбәйләнеш, һөйләм, уларҙың үҙенсәлектәре;

- телмәр практикаһында ситуация һәм аралашыу стилендә тел берәмеген урынлы ҡулланыу;

- фонетик һәм лексик системаның төп үҙенсәлектәрен һәм рус теле менән сағыштырмаса башҡорт теленең грамматик төҙөлөшөн белеү;

- башҡорт әҙәби тел нормаларын һәм телмәр этикетын белеү, уларҙы әйтергә теләгән фекереңде төҙөгәндә, йәғни телдән һәм яҙма телмәр практикаһында ҡулланыу;

- төрлө төрҙәге лингвистик, ике телле һүҙлектәр менән ҡуллана белеү;

- төрлө функциональ стиль һәм жанрҙағы текст йөкмәткеһен уҡыу һәм аңлау: әҙәби (шиғыр, йыр, хикәйә, повесть һәм романдарҙан өҙөктәр), ғилми һәм популяр (ғилми һәм популяр журналдарҙан мәҡәләләр), публицистик (хроника, информацион хәбәрҙәр, комментарий), эшлекле (анкета, белдереү, ышаныс ҡағыҙы һ. б.);

- ғәҙәти темпта тәҡдим ителгән мәғлүмәтте (уҡытыусы телмәре, радио һәм телевидение дикторы телмәре һ.б.) аңлау;

- аралашыу сфераһын һәм ситуацияны иҫәпкә алып, төрлө жанрҙа һәм стилдә текст төҙөү; көнкүреш, уҡыу, социаль мәҙәни темаға телмәр этикет нормаларын һаҡлап, үҙ инициативаһы менән диалог ҡороу;

- текст менән мәғлүмәт сығанағы булараҡ эш итә белеү, текстҡа төрлө аспектта

анализ, тексты планға, тезисҡа, конспектҡа өйләндереүҙең төрлө информацион төрҙәрен үҙләштереү;

- текст фрагменттарын рус теленән башҡорт теленә тәржемә итеү.

Программа адаптик йөкмәткегә ҡоролған

**Коммуникатив сферала** (башҡорт телен аралашыу сараһы булараҡ өйрәнеүҙә)

- аралашыуҙың типик ситуацияларында этикет диалог алып барыу;

- уҡыусының үҙе, ғаиләһе, дуҫы тураһында һөйләүе; предмет, картинаны һүрәтләүе; персонажды ҡыҫҡаса ҡылыҡһырлауы;

Тел компетенцияһы (тел сараларын үҙләштереү).

башҡорт теленең өндәрен дөрөҫ әйтеү һәм айырыу; һүҙҙәргә һәм фразаларға дөрөҫ баҫым ҡуйыу;

төрлө һөйләм төрҙәрен интонация менән укыу;

башланғыс мәктәп курсында өйрәнелгән укыу һәм орфографик ҡағиҙәләрҙе ҡулланыу; тыңлап аңлау:

уҡыусының укытыусы һәм класташтарының телмәрен тыңлап аңлауы; аудиояҙмаларҙағы текстарҙың йөкмәткеһен аңлауы;

**уҡыуҙа:**өйрәнелгән тел материалына таянып төҙөлгән ҙур булмаған текстарҙыҡысҡырып уҡыу;

өйрәнелгән тел материалы менән бер рәттән яңы һүҙҙәрҙе лә үҙ эсенә алған текстарҙы эстән укыу һәм уларҙың төп йөкмәткеһен аңлау, текстан кәрәкле информацияны табыу;

**яҙма телмәрҙә:**яҙыу техникаһына эйә булыу;

үрнәк буйынса байрам менән ҡотлау һәм шәхси хат яҙыу.

башланғыс мәктәп курсында өйрәнелгән лексик берәмектәрҙе (һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, баһалау лексикаһы, телмәр клишелары) һәм грамматик күренештәрҙе таныу һәм телмәрҙә ҡулланыу.

Социомәҙәни компетенция.

А. Географик атамаларҙы, билдәле балалар әҫәрҙәренең персонаждарын, популяр әкиәттәрҙең сюжеттарын, балалар фольклорының ҙур булмаған әҫәрҙәрен (шиғырҙар, йырҙар) белеү;

**Танып белеү сфераһы:** Башҡорт һәм рус телдәренең күренештәрен сағыштыра белеү; өлгө буйынса күнегеүҙәр эшләй белеү; ҡағиҙәләр, таблицаларҙы ҡуллана белеү; үҙ-үҙеңде баһалай белеү;

**Дөйөм ҡиммәттәргә йүнәлеш сфераһы: б**ашҡорт телен фекер, хис-тойғо, эмоцияларҙы белдереү сараһы булараҡ ҡабул итеү; балалар фольклоры ярҙамында башҡорт халҡының рухи ҡиммәттәрен үҙләштереү.

**Эстетик сфера**: башҡорт телендәге хис-тойғо һәм эмоцияларҙы белдереүсе сараларҙы үҙләштереү; балалар әҙәбиәте үрнәктәре менән танышҡанда матурлыҡты таныырға өйрәнеү.

**Хеҙмәт сфераһы**: укыу процесында билдәләнгән планға ярашлы эшләй белеү.

**5 – 9 класс укыусыларының белем кимәленә талаптар.**

**/Ученик научится/**

5 класс укыусыларының белеменә талаптар:

- Уҡытыусы укыған йәки һөйләгән, үҙең укыған тексты аңлай алыу; 3-6 һөйләмдән торған диалогты аңлау, уны дауам итә белеү;

- Уҡыған әҫәр, картина, экскурсия, ҡараған диафильм буйынса әңгәмәлә ҡатнашыу;

- предметты, күренеште элементар рәүештә һүрәтләү, уға үҙ мөнәсәбәтеңде булдырыу;

- хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәрҙе, поэтик әҫәрҙәрҙе дөрөҫ интонация менән һөйләү;

- 5 – 7 шиғырҙы яттан тасуири һөйләй белеү;

- тиҙәйткестәрҙе, һынамыштарҙы шыма итеп әйтә белеү.

6 класс уҡыусыларының белеменә талаптар:

- Һүрәтләү, хикәйәләү тибындағы текстарҙы тыңлау һәм аңлап ҡабул итеү;

- Бирелгән тема буйынса диалог төҙөү, диалогты дауам итеү;

- Ишеткәнде, күргәнде 4-6 һөйләм менән бәйләнешле итеп һөйләү.

- Ҡысҡырып шыма һәм тасури уҡыу.

7 класс уҡыусыларының белеменә талаптар:

- Өйрәнелгән әҫәрҙәрҙең авторын, исемен белеү;

- Яҙыусы ижад иткән художестволы картиналарҙы уйлап күҙ алдына баҫтырыу;

- Эпик һәм лирик әҫәрҙе айыра белеү;

- Программала ятлау өсөн тәҡдим ителгән әҫәрҙәрҙең тексын ятлау, 8-10 шиғырҙы яттан тасуири һөйләй белеү.

- Художестволы, фәнни популяр һәм публицистик текстарҙы ҡысҡырып, етеҙ уҡыу;

8 класс уҡыусыларының белеменә талаптар:

-Уҡығанды, һөйләгәнде аңлау, йөкмәтке буйынса һорауҙар, һәм шул һорауҙарға яуап бирә белеү;

- Прозаик текстарҙы дөрөҫ, шыма, аңлы уҡыу белеү;

- Уҡылған тексты өлөштәргә бүлеү,исем биреү, элементар план төҙеү;

- Текстан аңлашылмаған һүҙҙәрҙе табыу, һүҙлектәрҙе файҙаланыу;

- Башҡортостан тураһында мәғлүмәттәргә эйә булыу;

- Башҡорт халҡының мәҡәлдәре, йомаҡтарын белеү;

- Хәрефтәрҙе һәм һүҙҙәрҙе матур , дөрөҫ яҙа белеү;

- Өйрәтеү диктанттар яҙа белеү.

9 класс уҡыусыларының белеменә талаптар:

- Ҙур булмаған эпик әҫәрҙәрҙе йәки уларҙың өҙөктәрен һөйләп биреү. Художество әҫәрҙәрҙе инсценировкалау.

-Уҡытыусы ҡуйған проблемалы һорау ярҙамында героға характеристика биреү;

-тәҡдим ителгән әҫәрҙе тәржемә итә белеү, таныш булмаған һүҙҙәрҙе айыра белеү;

-10-12 шиғырҙы яттан тасуири һөйләй белеү;

-эпик, логик, лироэпик һәм драматик әҫәрҙәрҙе айыра белеү.

- Һорауҙарға тулы яуап һәм геройҙарға баһалама биреү;

-уҡылған әҫәрҙәргә үҙ мөнәсәбәтеңде белдерә белеү.

-Телмәр ағышында өндәрҙең үҙгәреүен айыра һәм аңлата белеү;

-диалогтарҙа башҡа кешеләрҙең телмәрендәге орфоэпик хаталарҙы күҙәтә һәм төркөмләй белеү;

-һүҙлектәр менән файҙалана белеү;

-диктант, изложение һәм иншалар яҙыу;

-өндәш һүҙҙәр, улар эргәһендә тыныш билдәләренең ҡуйылышы;

-һүҙҙәрҙе яһаусы һәм үҙгәртеүсе ялғауҙарҙың килеү тәртибе (рус теле менән сағыштырыу).

-үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙҙәрҙең телмәрҙәге роле.

**Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе**
**1-се бүлек. Белем көнө. Текст.**
**Грамматика буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау**

**1-се сентябрь -“Белем көнө”** Был тема (1 сентябрь – Белем көнө. Мәктәп, уҡыу, белем алыу, тел өйрәнеү) башлыса “Көҙ” темаһы менән бергә үрелеп бара. Бер үк ваҡытта, уҡыусыларҙың йәйге каникулды нисек үткәреүе тураһында әңгәмә үткәреү, фекер алышыуҙар ойошторола. Был темаларға ҡағылышлы һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, һөйләмдәр иҫкә төшөрөлә, һүҙлек запасын байытыу йәһәтенән яңылары үҙләштерелә. Башланғыс кластарҙа өйрәнелгән һәм яңы үҙләштерелгән һүҙҙәр ярҙамында бәләкәй хикәйәләр, диалогтар төҙөргә тәҡдим ителә. Теманы үҙләштереү барышында уҡыусылар яҙыусының тормош юлы һәм темаға тап килгән әҫәрҙәре менән ҡыҫҡаса таныша башлайҙар. Дәреслектең тәүге темаларында грамматиканан үтелгәндәрҙе ҡабатлау ойошторола.

Телмәр әҫәре булараҡ текст. Тексттың атамаһы, тексттың төп билдәләре (өлөштәргә айырылыуы, мәғәнәүи берҙәмлек, бәйләнешлек). Тема, коммуникатив күрһәтмә, тексттың төп мәғәнәһе. Тексттың микротемаһы.

Текст өлөштәрене һәм һөйләмдәренең бәйләнеш саралары. Тексттың коммуникатив-стилистик сараһы булараҡ абзац.

Тексттың функциональ-мәғәнәүи төрө:һүрәтләү, хәбәрләү, фекер йөрөтөү. Текст структураһы. Текст планы. Текста теманы үҫтереү ысулдары.

Тексты мәғлүмәти эшкәртеүҙең төп төрҙәре: план, конспект, аннотация.

Тема, төп мәғәнә, телмәрҙең функциональ-мәғәнәүи төрөнә ҡарау күҙлегенән тексты анализлау. Тексттың планын төҙөү. Тексттың мәғәнәүи бүлектәрен, һөйләмдәрҙең бәйләнеү ысулдары һәм сараларын билдәләү. Текста тел үҙенсәлектәрен анализлау. Тема, маҡсат, төп мәғәнә, адресат, ситуация һәм аралашыу шартынан тел сараларын һайлау. Төрлө типтағы, стилдәге, жанрҙағы текстарҙы төҙөү. Тексты төҙөү нормаһын һаҡлау (логик яҡтан төҙөк, эҙмә-эҙлекле, бәйләнешле, темаға ярашлы һ.б.). Телдән һәм яҙма телмәрҙе баһалау һәм мөхәррирләү. Тексты мәғлүмәти эшкәртеү.

**2-се бүлек. Тыуған илем-Башҡортостаным**
**Телмәр һәм аралашыу телмәре**

Уҡыусыларҙы үҙҙәре йәшәгән республиканың үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге менән таныштырыу төп маҡсат булып тора. Республика тураһында улар тулы мәғлүмәткә эйә булырға тейеш. Бының өсөн “Башҡортостан” темаһы буйынса тәҡдим ителгән материалдың тулы һәм тарихи яҡтан дөрөҫ сағылдырылыуына иғтибар итергә кәрәк. Башҡортостан тураһында һөйләгәндә фактик материалдарға таяныу мөһим, бының өсөн дәрестә бик күп күргәҙмәлелек, тарихи мәғлүмәтле китаптар, таблицалар, карталар ҡулланыу кәрәк. Уҡыусыларҙың үҙ тыуған республика тураһында, уның уңыштары, үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге, уның байлыҡтары, күренеклк шәхестәре, матурлығы, төҙөклөгө хаҡында дөрөҫ, тулы, анығ итеп һөйләй белеүҙәренә өлгәшеү.

Айырым темаларҙың береһе булып телмәр һәм аралашыу телмәре тора. Икенсе темаларҙы үтеү барышында башҡа грамматик темаларҙы ла үҙләштереү күҙ уңында тотола.

**3-сө бүлек. Үҙем тураһында**
**Фонетика һәм орфоэпия**

“Үҙем тураһында” темаһын үҙләштереү барышында уҡыусы үҙе тураһында һөйләргә өйрәнергә тейеш. Уҡыусыға үҙенең ғаилә ағзалары, яҡын туғандары тураһында мәғлүмәт бирә алыуын да күҙ уңында тоторға кәрәк. Уны үҙенең бөгөнгөһө, киләсәккә пландары, уй-хыялдары менән уртаҡлаша белергә өйрәтеү. Кешенең тән ағзалары, эске органдарының атамаларын белеү шәхси гигиена, көн тәртибе, һаулығы менән берлектә алып барыла. Кешегә һау-сәләмәт булыу өсөн нимә эшләргә кәрәклеге тураһында

әңгәмәләр үткәреү, әҫәрҙәр уҡыуҙы ла ойошторорға кәрәк. Тема буйынса эш көндәлек тормошобоҙ, беҙгә кәрәк-яраҡ әйберҙәр менән бәйләнгән. Аҙыҡ-түлек, кейем-һалымды һатып алыу магазин, баҙар менән бәйләнеп килә. Шуға ла был темаларҙы берлектә өйрәнеүҙе отошло тип таптыҡ. Тема буйынса һәр нәмәнең исемен, атамаһын ғына белеү генә ҡаралмай, ә уҡыусыларҙы һатып алыу этикеты менән таныштырыу, һөйләшеүгә, аралашырға өйрәтеү маҡсаты ҡуйыла.

Теманы үҙләштереү барышында һүҙлек, белешмә һәм смс-хәбәрҙәрҙән мәғлүмәт эҙләүҙә алфавитты ҡулланыу.

Телдең берәмеге булараҡ өн. Һуҙынҡы, тартынҡы өндәрҙең системаһы. Телмәр ағымында өндәрҙең үҙгәреше. Ижек. Баҫым. Норматив әйтелеш һәм баҫымдың төп ҡағиҙәләре. Нәҙек һәм ҡалын һуҙынҡыларҙы айырыу. Әҙәби тел нормаларына ярашлы һүҙҙәрҙең дөрөҫ әйтелеше. Фонетик-орфоэпик белем һәм күнекмәләрҙе уҡыусының үҙ телмәрендә ҡулланыуы

## 4- се бүлек. Йыл миҙгелдәре
## Морфемика һәм һүҙьяһалыш
## Лексикология һәм фразеология

Йыл миҙгелдәре, һәр йыл миҙгеленә хас үҙенсәлектәр менән таныштырыу. Тәбиғәт күренештәрен күҙәтә һәм алған тәьҫораттарҙан сығып һөйләй белеү. Йыл миҙгелдәрен, һәр миҙгелгә ҡараған ай исемдәрен дөрөҫ әйтә һәм телмәрҙә ҡуллана белеү.

“Яҙ етте” темаһын үтеү барышында уҡыусылар, иң беренсе сиратта, яҙ билдәләрен күрә һәм яҙ миҙгеленең үҙенсәлектәрен әйтә белергә тейеш. Был тема буйынса күп кенә әҫәрҙәр тәҡдим ителгән. Әҫәрҙә яҙғы тәбиғәт, ҡоштар, йәнлектәр, ағастар, сәскәләр тураһында яҙыла. Шулай уҡ 1 май һәм 9 май байрамдары, дуҫлыҡ тураһында ла һөйләшеү тәҡдим ителә.

Ҡыш миҙгеленең үҙенсәлектәрен билдәләү. Тәбиғәтте күҙәтеү, экскурсиялар ойоштороу. Алған тәьҫораттар менән уртаҡлашыу. Уҡыусының күргәндәре тураһында ябай формала иркен һөйләй белеүенә өлгәшеү. Бының өсөн төрлө ысулдарҙы файҙаланырға кәрәк: уҡығанды тыңлау, һүрәт-картина буйынса һөйләү, диалог төҙөү, тәҡдим ителгән әҫәрҙәр, шиғырҙар уҡыу, уларҙы анализлау, һүҙлек буйынса эш һ.б.

Йәй миҙгеленең үҙенсәлектәрен билдәләү. Уларҙың һүҙ байлығын арттырыу, һөйләү һәм яҙма телмәрен үҫтереү. Тәбиғәтте күҙәтеү, алған тәьҫораттар буйынса фекер алышыу. Был айҙарҙа уҙғарылған милли байрамдар менән таныштырыу, улар тураһында белгәндәрен һөйләтеү. Балаларҙың йәйге ялы,хеҙмәте, ололарға ярҙамы тураһында әҫәрҙәр уҡыу һәм әңгәмәләр үткәреү.

Көҙгө муллыҡ тураһында мәҡәл, әйтемдәргә күберәк урын бирелә. Кеше тормошонда хеҙмәттең роле, ололарҙың һәм балаларҙың хеҙмәте тураһында фекер алышыу.

Ялғауҙар һәм уларҙың дөрөҫ яҙылышын ғәмәлдә дөрөҫ ҡулланыу. Ҡушма һәм парлы һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышын үҙләштереү.

Лексикологияның төп атамаларын үҙләштереү. Фекерҙе, хисте, эмоцияны сағылдырыуҙа һәм формалаштырыуҙа һүҙҙең ролен аңлау. Һүҙҙең лексик, грамматик мәғәнә айырмалыҡтарын аңлатыу. Күп мәғәнәле һүҙҙәрҙе айырыу: омоним, синоним, антонимдарҙы таба белеү.

Башҡорт теленең синоним һәм антоним һүҙлектәре.

Фразеологизмдар, уларҙың билдәһе һәм мәғәнәһе. Мәҡәлдәр, әйтемдәр, афоризмдар, ҡанатлы һүҙҙәр. Фразеологик һүҙлектәр.

Фекерҙе, хисте, эмоцияны белдереүҙә һүҙҙең мәғәнәһен аңлау; үҙ лексиконыңды тәрәнәйтеү кәрәклегенә төшөнөү.

Төрлө типтағы (аңлатмалы, синоним, антоним, фразеологик һ.б.) лексик һүҙлектәрҙән кәрәкле мәғлүмәтте алыу һәм уларҙы кәрәкле урында ҡулланыу.

## 5-се бүлек. Күңелле байрамдар
## Морфология

“Яңы йыл” темаһы “Ҡыш”темаһы менән берлектә алып барыла. Уҡыусыларҙың ҡыш миҙгеле буйынса белемдәрен артабан да үҫтереү төп маҡсаттарҙың береһе булып тора. Ҡыш миҙгеленең үҙенсәлектәрен билдәләү, Яңы йыл, байрамдар менән туғандарҙы, яҡын кешеләрҙе ҡотларға өйрәтеү, һәр байрамдың үҙенә генә хас күренештәре, үҙенсәлектәре тураһында һөйләтеү.

8 байрамына ҡағылышлы темаларҙы үҙләштереү әсәйҙәр тураһында шиғыр, хикәйәләр уҡыу менән берлектә алып барыла. Әсәйҙең донъяла иң ҡәҙерле кеше икәнен, уны ихтирам итергә, яратырға, ҡәҙерләргә кәрәклекте аңлатыу. Шулай уҡ әсәй темаһы, һис шикһеҙ, ғаилә темаһы менән берлектә бара, шуның өсөн башланғыс кластарҙа үтелгән ғаилә темаһы ҡабатлана һәм уҡыусыларҙың һүҙлек запасын үҫтереү өҫтөндә даими эш алып барыла. Тема байрам төшөнсәһен үҙ эсенә алғанлыҡтан, ҡотлау открыткалары, смс-хәбәрҙәр, электрон почтаға ҡотлауҙар яҙырға, ҡотлау һүҙҙәрен әйтә белергә өйрәтеү ҙә ҡарала.

Йола байрамдарын үткәндә, һүҙҙе башҡорт халҡының, Башҡортостанда йәшәүсе башҡа халыҡтарҙың яҙғы тәбиғәт менән бәйле ғөрөф-ғәҙәттәре һәм матур йолалары тураһында алып барырға тәҡдим ителә. Уҡыусыларға уларҙың кеше тормошондағы әһәмиәтен, мәғәнәһен, тергеҙеү кәрәклеген еткереү.

Тәҡдим ителгән темалар буйынса, яҙыусы, шағирҙарҙың ижадын өйрәнеү, уларҙың әҫәрҙәрен уҡыу, идея-тематик йөкмәткеләрен билдәләү; уҡыусыларҙың һөйләй, яҙма телмәрен, бәйләнешле телмәрен үҫтереү, һүҙлек запасын арттырыу төп маҡсаттарҙың береһе булып тора.

Морфологияның төп аңлатмаларын үҙләштереү. Һүҙҙең лексик мәғәнәһенән айырмалы рәүештә, грамматик үҙенсәлектәрен аңлау. Үҙ аллы һүҙ төркөмдәрен һәм уның формаларын таныу; ярҙамсы һүҙ төркөмдәренең телмәрҙәге әһәмиәте һәм уның функцияһы менән таныштырыу.

## 6-сы бүлек. Дуҫлыҡ ҡәҙерен бел
## Морфология

Башҡортостан Республикаһындағы күп милләтттәрҙең дуҫ йәшәүе, халыҡтар дуҫлығы тураһында текстар уҡыу, әңгәмә ойойштороу. Кешеләр араһында мөнәсәбәт, ысын дуҫлыҡтың ҙур мәғәнәгә эйә булыуы, уны һаҡлай белеү. Бөйөк шәхестәр тормошонан, көндәлек тормоштан алынған күренештәр менән бәйләп алып барыу. Был тема буйынса башҡорт халыҡ ижады жанрҙарын, башҡорт һәм башҡа милләт әҫәрҙәрен ҡулланыу ҡарала.

Исемдең дөйөм категориаль мәғәнәһен, морфологик билдәләрен һәм синтаксик ролен анализлау.

Уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ исемдәр. Башҡорт телендә енес төшөнсәһе, һан, килештәрҙе таныу. Исемдәрҙең ниндәй килештә килеүен билдәләү. Бирелгән морфологик билдәләр буйынса исемдәрҙе төркөмләү. Исемдәрҙе лексик һәм грамматик нормаларға ярашлы ҡулланыу.

Сифаттың дөйөм категориаль мәғәнәһен, морфологик билдәләре һәм синтаксик ролен анализлау. Сифат дәрәжәләрен таныу; сифаттарҙың яһалышы, уларҙың дөрөҫ яҙылышын төшөнөү, миҫалдар килтереү.

Телмәрҙә синонимик сифаттарҙы, эпитет ролендә булған сифаттарҙы ҡулланыу матурлығы

## 7-се бүлек. Башҡортостан йылғалары, күлдәре. Экология мәсьәләһе
## Морфология

Был темала иң беренсе нәүбәттә Башҡортостан Республикаһы тәбиғәтенең матурлығы , байлығы тураһында уҡыусыларға еткереү. Респуликалағы йылға , күлдәр

тураһында мәғлүмәт биреү. Уларҙың кеше тормошондағы роле, әһәмиәте. Дәрестә бына ошо тәбиғәт байлығы, Башҡортостанда үҫкән үҫемлектәр донъяһы темаһын асырға кәрәк. Бында үҫемлектәр исемдәре, уларҙың ҡайһы береһенә үҙенсәлектәре буйынса характеристика бирелә. Һирәк осраған, Ҡыҙыл китапҡа ингән үҫемлектәр. Дарыу үҫемлектәре һ.б. Үҫемлектәрҙе өйрәнеү һәм һаҡлау һ.б.

Был теманы үҙләштергәндә, йылғаларҙың атамалары, уларҙың аңлатҡан мәғәнәһе, килеп сығышы (этимологияһы) хаҡында һөйләү, экология мәсьәләһен күтәреү, уҡыусыла патриотик планда ғорурлыҡ хисе тәрбиәләүҙе күҙ уңында тоторға кәрәк.

Һандың дөйөм категориаль мәғәнәһе, морфологик билдәләре һәм синтаксик ролен анализлау. Төп, рәт, бүлем, сама, йыйыу, кәсер, үлсәү һандарын айыра белеү. Нумератив һүҙҙәр тураһында белеү. Һандарҙың дөрөҫ яҙылышын үҙләштереү. Морфологик билдәләренә ҡарап, һандарҙы төркөмләү. Һандарҙы телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу.

Алмаштарҙы башҡа һүҙ төркөмдәре менән сағыштырыу. Төрлө алмаш төркөмсәләрен килеш менән дөрөҫ үҙгәртеү. Морфологик билдәләренә ҡарап алмаштарҙы төркөмләү. Алмаштарҙы һөйләмдәрҙе, текст өлөштәрен бәйләүҙә һәм телдәге этик нормаларға ярашлы телмәрҙә ҡулланыу.

Ҡылымдың дөйөм категориаль мәғәнәһен, морфологик билдәләрен һәм синтаксик ролен анализлау.

## 8-се бүлек. Исемдәрҙә-ил тарихы
## Морфология

Кеше тормошонда атамаларҙың да (кеше исеме, фамилияһы, атаһының исеме: ауыл, ҡала, тау, йылға һ.б.) роле ҙур. Унһыҙ тормошто күҙ алдына килтереп булмай. Атамаларҙың төрҙәре күп. Тел ғилемендә уларҙы өйрәнеүсе фән бар. Ул-ономастика. Ономастика фәне үҙе бер нисә тармаҡтан тора: антропонимика - шәхес атамаларын, топонимика - географик атамаларҙы, этнонимика-милләт, халыҡ, ҡәбилә исемдәрен, зоонимика - ҡош-ҡорт, хайуан ҡушаматтарын, космонимика - күк есемдәре исемдәрен, теонимика - илаһи көс исемдәрен, прагматонимика төрлө әйбер, тауар исемдәрен, маркаларын өйрәнеүсе фән.

Рәүештең дөйөм категориаль мәғәнәһен, морфологик билдәләрен анализлау, унң синтаксик функцияһын билдәләү.

## 9-сы бүлек. Сәнғәт оҫталары
## Морфология

Республиканың данлыҡлы һәм арҙаҡлы шәхестәре менән танышыуҙы дауам итеү. Сәнғәт оҫталарының тормош юлы һәм ижады менән таныштырыу. Теле-радио тапшырыуҙар, яҙмалар ҡарау. Уларҙың әҫәрҙәрен таныу, данлыҡлы кешеләребеҙ тураһында һөйләй белеү. Йырҙар өйрәтеү, бергәләп йырлау, һәләтле балалар менән айырым эшләү.

Ярҙамсы һүҙ төркөмдәрен бер-береһенән айырыу. Телмәрҙә урынлы ҡулланыу.

## 10-сы бүлек. Спорт һәм сәләмәт тормош
## Синтаксис

Сәләмәт булыу өсөн, спорт менән шөғөлләнергә кәрәк икәнлеген аңлатыу һәм был турала уҡыусылар менән һөйләшеү, әңгәмә ойоштороу. Уларҙы ниндәй спорт төрө менән ҡыҙыҡһыныуҙары, күренекле спортсмендар тураһында һөйләргә өйрәтеү. Спорт тураһында теле-радио тапшырыуҙары, газета материалдары буйынса һөйләү.
Башҡортостанда спорт төрҙәре. Спорт өлкәһендә данлыҡлы кешеләр.

Грамматиканың бүлеге булараҡ синтаксис. Синтаксистың берәмеге булараҡ һөйләм һәм һүҙбәйләнеш. Синтаксик бәйләнештең төрҙәре һәм саралары.

**11 –се бүлек. Башҡорт халыҡ ижады**
**Синтаксис**

Халыҡ ижады (әкиәт, йомаҡ, мәҡәл) тураһында дөйөм төшөнсә. Фольклорҙың коллектив ижад булыуы. Фольклор һәм яҙма әҙәбиәт. Башҡорт халҡының һәм республикала йәшәгән башҡа халыҡтар ижадының һаҡланып, быуындан-быуынға тапшырылып килгән йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре, әҙәп ҡағиҙәләре менән таныштырыу.
Синтаксистың төп аңлатмаларын үҙләштереү.

Фекерҙе формалаштырыуҙа һәм сағылдырыуҙа синтаксистың ролен, һүҙ менән һүҙбәйләнештең айырмалыҡтарын аңлау. Башҡорт телендә һөйләм, уның төҙөлөшөн рус телендәге һөйләм менән сағыштырыу.

**12-се бүлек. Хеҙмәт төбө-хөрмәт**
**Дөрөҫ яҙыу: орфография һәм пунктуация**

Республикабыҙ кешеләренең хеҙмәте, һөнәрҙәре, балалрҙың ололарға ярҙамы һәм кешеләрҙең һәйбәт сифаттары сағылған шиғырҙар, хикәйәләр уҡыу. Кеше тормошонда хеҙмәттең роле, ололарҙың һәм балаларҙың хеҙмәте, һөнәр, кәсептәрҙең күплеге, һәр кешенең үҙенә һөнәр һайлай белеүе тураһында.

Тыныш билдәләре һәм уларҙың функцияһы. Тыныш билдәләренең төрҙәре. Һөйләм аҙағында тыныш билдәләре.

Тура телмәр һәм цитата, диалогтарҙа тыныш билдәләре. Яҙма телмәрҙә орфографик һәм пунктуацион нормаларҙы күҙәтеү.

Дөрөҫ яҙыу өсөн, орфографик һүҙлектәр һәм белешмәләр ҡулланыу.

**13-сө бүлек. Халыҡ йолалары, ғөрөф-ғәҙҙәттәре, әҙәп ҡағиҙәләре**
**Тел һәм мәҙәниәт**

Башҡорт халҡының һәм башҡа милләт халыҡтарының һаҡланып, быуындан-быуынға тапшырылып килгән йолалары, ғөрөф-ғөҙәттәре, әҙәп ҡағиҙәләре менән таныштырыу.

Башҡорт халҡының милли аштары менән танышыу. Уларҙы әҙерләү үҙенсәлектәре менән таныштырыу.

Уҡыусыларҙы башҡорт атының килеп сығыуы, тарихи үткәне менән таныштырыу. Уларҙы йәш үҙенсәлектәре буйынса бүленеүен аңлатыу, йылҡы малына һөйөү тойғоһо тәрбиәләү.

Күренекле шәхестәрҙең Башҡортостанда ҡымыҙ менән дауаланыуы тураһында һөйләү.

Телдә мәҙәниәт һәм халыҡ тарихының сағылышы. Башҡорт телмәр этикеты.

Башҡорт халыҡ ижады әҫәрҙәрендә, матур әҙәбиәттә һәм тарихи текстарҙа милли-мәҙәни компонент мәғәнәһе менән тел берәмеген асыу. Лингвистик һүҙлектәрҙең (аңлатмалы, этимологик һ.б.) мәғәнәһен аңлатыу. Уҡыу эшмәкәрлегендә һәм көндәлек тормошта башҡорт телмәр этикет ҡағиҙәләрен урынлы ҡулланыу.

**Уҡытыу предметының сәғәттәр һаны**
**5 –се класс**
**Һаумы мәктәп (5 сәғәт)**

Был темаларға ҡағылышлы һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, һөйләмдәр иҫкә төшөрөлә, һүҙлек запасын байытыу йәһәтенән яңылары үҙләштерелә. 1-4-се кластарҙа өйрәнелгән һәм яңы үҙләштерелгән һүҙҙәр ярҙамында бәләкәй хикәйәләр, диалогтар төҙөргә тәкдим ителә. Грамматика буйынса темалар: башҡорт теленең өн һәм хәрефтәре; исем, исемдең күплек ялғауы, исемдәрҙең һан менән үҙгәреше, һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе, ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылар; сифат.

**Үҙем тураһында (7 сәғәт)**

Был темаларға ҡағылышлы һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, һөйләмдәр иҫкә төшөрөлә, һүҙлек запасын байытыу йәһәтенән яңыларын үҙләштереү. 1-4-се кластарҙа өйрәнелгән һәм яңы үҙләштерелгән һүҙҙәр ярҙамында бәләкәй хикәйәләр, диалогтар төҙөү. Грамматика буйынса темалар: исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше, алмаш, зат алмаштары, зат алмаштарының килеш менән үҙәгреше, к-г, ҡ-ғ, п-б тартынҡыларының сиратлашыуы.

**Йыл миҙгелдәре (5 сәғәт)**

Тәбиғәт күренештәрен күҙәтеүҙән алған тәьҫораттарҙан сығып һөйләй белеү. Йыл миҙгелдәрен, һәр миҙгелгә ҡараған ай исемдәрен дөрөҫ әйтә һәм телмәрҙә ҡуллана белеү. Грамматика буйынса темалар: һорау алмаштары, күрһәтеү алмаштары, билдәһеҙлек һәм билдәдәү алмаштары.

**Яңы йыл ҡотло булһын! (3сәғәт)**

Ҡыш миҙгеле тураһында һөйләй белеү. Яңы йыл менән ата-әсәне, класташтарҙы, туғандарҙы ҡотларға өйрәнеү. Грамматика буйынса темалар: ҡылымдарҙың зат һәм һан менән үҙгәреше.

**Башҡортостаныңды беләһеңме? (3 сәғәт)**

Уҡыусы аңына үҙе йәшәгән ерҙең – Башҡортостандың – тарихы, уның байлығы, күренекле шәхестәре һ.б. хаҡында бер бөтөн фекр тыуҙырыу һәм ул турала һөйләй белеү. Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәрҙе дөрөҫ яҙыу, ҡулланыу.

**8 март – ҡатын-ҡыҙҙар көнө (5 сәғәт)**

Алдағы кластарҙа үтелгән ғаилә темаһын ҡабатлау һәм был төшөнсәләрҙе аңлау өсөн һүҙлек запасын үҫтереү. Тема байрам төшөнсәһендә үҙ эсенә алғанлыҡтан ҡотлау открыткалар яҙыу, ҡотлау һүҙҙәрен әйтә белеү. Антоним, омоним, синонимдарҙы телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу.

**Яҙғы эштәр (4 сәғәт)**

Яҙғы эштәр, яҙғы баҡса эштәре, баҫыу эштәре тураһында һөйләү, әңгәмәлә ҡатнашыу. “Яҙғы көн йылды туйҙыра” тигән мәҡәлдең асылын аңлау, экскурсияларға йөрөү. Башҡорт халҡының, Башҡортостанда йәшәүсе башҡа халыҡтарҙың яҙғы тәбиғәт менән бәйле ғөрөф-ғәҙәттәре һәм матур йолалары тураһында белеү. Һан һүҙ төркөмө тураһында төшөнсә биреү.

**Йәйҙе ҡаршылайбыҙ (3 сәғәт)**

Йәйге байрамдар, йәйге ялға пландары тураһында һөйләй белеү, диалогтар ҡороу, һүҙ байлығын арттырыу.

**6 –сы класс**

**Беҙҙең мәктәп. (3 сәғәт)**

Башҡорт теленең үҙенсәлекле өн-хәрефтәрен ҡабатлау, уларҙы дөрөҫ әйтеү өҫтөндә эшләү, һүҙ тураһында төшөнсә алыу. Исем һүҙ төркөмө. Текстағы исемдәрҙе табыу. Уларҙың һөйләмдәге роле. Һүҙ байлығын арттырыу. Мәктәп тураһында текст төҙөү.

**Көҙгө тәбиғәт (3 сәғәт)**

**Башҡортостан ере буйлап…(5 сәғәт)**

**Дуҫлыҡ ҡәҙерен бел (4 сәғәт)**

Бер-берең менән мөнәсәбәт тураһында әңгәмә. Был бүлектә уҡыусылар ысын дуҫлыҡ, дуҫ тураһында төшөнсә ала, һүҙ байлығын арттыра. Ҡылымдың заман формаларын телмәрҙә дөрөҫ ҡулланырға өйрәнеүҙе дауам итәләр. Дуҫтары тураһында текст төҙөү өҫтөндә эшләйҙәр.

**Ҡыш дауам итә (5 сәғәт)**

Уҡыусыны йыл миҙгелдәре, күргәндәре тураһында ябай формала иркен һөйләй белеүенә өлгәштереү. Ҡылымдың хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарын телмәрҙә дөрөҫ файҙаланыуға өлгәшеү.

**Этикет ҡағиҙәләре (3 сәғәт)**

Иҫәнләшә белеү, әҙәплелек ҡағиҙәләре тураһында һөйләшеү. Сәләмләү һүҙҙәрен ҡулланып диалогтар төҙөү.

**Яҙ килә, яҙ! (3 сәғәт)**

Үҫемлектәрҙең атамаларын өйрәнеүҙе яҙ айы, яҙғы тәбиғәт тураһында һөйләшеү менән бергә алып барырға.

**Яҙғы эштәр һәм йола байрамдары (8 сәғәт)**

Кешеләрҙең баҡса һәм ҡырҙағы эштәре тураһында һөйләшеү. Һүҙ байлығын арттырыу. 1 Май, 9 Май байрамдары тураһында, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусы кешеләрҙең үткән юлы менән танышыу.

**Йәмле йәй килә! (2 сәғәт)**

**7 –се класс**

**VI класта үтелгәндәрҙе ҡабатлау (3 дәрес)**

Сифат дәрәжәләре, исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше, һүҙҙәрҙең һөйләмдәге тәртибе темаларын ҡабатлау, алған белемде телмәрҙә ҡулланыу. М. Кәрим, К. Кинйәбулатова, З. Биишева ижады һәм тормошо менән тәрәнерәк танышыу. Улар тураһында ҡыҫҡаса һөйләргә өйрәнеү. Диалог һәм монолог ярҙамында бәйләнешле һөйләм төҙөүҙе дауам итеү. Мәҡәл, әйтемдәр менән танышыу. Үтелгән грамматик темаларҙы ҡабатлау.

**Ауыл тормошо (3 сәғәт)**

Ауыл тормошо, ауыл кешеләренең көнкүреше, хеҙмәт, игенсе хеҙмәте тураһындағы әңгәмәләрҙә ҡатнашыу. Икмәк үҫтереү, икмәктең өҫтәлгә килгәнгә тиклем үткән юлы, уны үҫтереүҙә ҡатнашҡан һөнәрҙәр тураһында мәғлүмәтле булыу. Ауыл халҡына, эшенә хөрмәт менән ҡарау. Улар тураһында ҡыҫҡаса һөйләргә өйрәнеү, һөйләм, текст төҙөү. Ауыл еренән сыҡҡан күренекле шәхестәрҙең тормош юлы менән танышыу. Сифат ҡылым тураһында мәғлүмәт биреү.

**Башҡортостан буйлап сәйәхәт (5 сәғәт)**

Башҡортостан тураһында 1-6 кластарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлап, белгән материалды эҙмә-эҙлекле итеп һөйләргә өйрәнеү, яңы мәғлүмәт алыу. Башҡортостан тураһында рус яҙыусылары, “Урал батыр” эпосы һ.б. танышыу.Башҡортостан йылғалары, ҡалалары, байлыҡтары тураһында белгән белемдәрҙе байытыу. Һөйләм, текст төҙөү, һөйләмдә һүҙҙәр тәртибен дөрөҫ ҡулланыу. Уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ исемдәргә күнегеүҙәр.Башҡортостандың боронғо ҡалаһы Арҡайым тураһында мәғлүмәт алыу. Башҡортостан темаһына шиғырҙар ятлау.

**Спорт. Спорт кәрәк-яраҡтары (5сәғәт)**

Кешегә сәләмәт булыу өсөн спорт менән шөғөлләнергә кәрәк икәнлеген аңлау, һәм был турала һөйләшеүҙә ҡатнашыу.Башҡортостандағы спорт төрҙәре тураһында һөйләү.Ҡылым төркөмсәләрен ҡабатлау. Спорт өлкәһендә данлыҡлы кешеләр тураһында ҡылым төркөмсәләрен ҡулланып текст төҙөү. Милли уйындар тураһында мәғлүмәт алыу. Спорт кәрәк-яраҡтары тураһында текст төҙөү. (Ирек Зарипов, Максим Чудов).. Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибен боҙмау. Киләсәк заман сифат ҡылым тураһында мәғлүмәт биреү.

**Мин һәм беҙҙең ғаилә (4 сәғәт)**

Үҙеңдең ғаиләң тураһында тулы һәм иркен һөйләй белеү. Ғаилә ағзаларын дөрөҫ атау, уларға ихтирамлы, иғтибарлы булыу. Ғаилә ағзалары тураһында яҙылған әҫәрҙәр уҡыу, уларҙы аңлы ҡабул итергә өйрәнеү, һөйләү күнекмәләрен үҫтереү. Уҡылған әҫәрҙәр буйынса план төҙөү, план буйынса һөйләү. Телмәр үҫтереүгә айырым иғтибар биреү. Билдәле рәссамдарҙың картинаһын ҡарау, аңлау һәм уның йөкмәткеһен һөйләргә өйрәнеү. Хәл ҡылым тураһында төшөнсә биреү.

**Әсәй, әсәкәйем (3 сәғәт)**

Әсәй, өләсәйҙәрҙең изгелеге, ҡәҙере хаҡында әҫәрҙәр уҡыу, йөкмәткеһе өҫтөндә эш төрҙәре башҡарыу, һүҙлек байлыҡтарын арттырыу. Ҡатын-ҡыҙҙар байрамы тураһында әңгәмәләрҙә, иртәлектәр үткәреүҙә, данлыҡлы ҡатын-ҡыҙҙар менән осрашыуҙарҙа ҡатнашыу. Теркәүес тураһында төшөнсә алыу. Теҙеү теркәүестәрен телмәрҙә ҡулланыу.

**Сәнғәт оҫталары (3 сәғәт)**

Республиканың данлыҡлы һәм арҙаҡлы шәхестәре менән танышыуҙы дауам итеү. Сәнғәт оҫталарының тормош юлы һәм ижады менән танышыу. Теле-радио тапшырыуҙар, яҙмалар ҡарау. Уларҙың әҫәрҙәрен таныу, данлыҡлы кешеләребеҙ тураһында һөйләй белеү. Йырҙар өйрәнеү, бергәләп йырлау. Мәктәп сәхнәһе өсөн концерт номерҙарын әҙерләүҙә ҡатнашыу. Эйәртеү теркәүестәре. Теркәүестәрҙең дөрөҫ яҙылышы темаһын үҙләштереү, нығытыу.

**Исемең матур – кемдәр ҡушҡан? Исемдәрҙә - ил тарихы (2 сәғәт)**

Исемдәрҙең мәғәнәһе, уның кеше холоҡ-фигеленә тәьҫир итеүе тураһында мәғлүмәтте үҙләштереү.Үҙ исемеңдең мәғәнәһен өйрәнеү Данлыҡлы кешеләрҙең исемдәренә бәйләп, төрлө тарихи ваҡиғалар һөйләү, әҫәрҙәр уҡыу. Атамалар буйынса легендалар, риүәйәттәр уҡыу. Бәйләүестәр. Яңғыҙлыҡ исемдәрҙе дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәһен ҡабатлау.

**Борон-борон заманда (2 сәғәт)**

Башҡорт халыҡ ижады темаһын киңәйтеү, уҡыусыларҙың белгәндәрен тулыландырыу, һүҙ байлығын, һөйләү телмәрен үҫтереү өҫтөндә эшләү. Башҡорт халыҡ әкиәттәре, Ф. Туғыҙбаеваның “Тайыштабан ниңә уйнарға сыҡманы?” әкиәтен уҡыу. Уларҙың айырмаһын билдәләү. Киҫәксә тураһында төшөнсә алыу. Киҫәксәләрҙең дөрөҫ яҙылышын үҙләштереү.

**Берҙәмлек, дуҫлыҡ, тыныслыҡ (2 сәғәт)**

Халыҡ-ара булған мөнәсәбәттәр тураһында мәғлүмәтле булыу,әңгәмәлә ҡатнашыу. Фекер йөрөтөргә һәм һөйләй белергә өйрәнеү. Уҡылған әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһе буйынса фекер алышыу. Мөнәсәбәт һүҙҙәр, ымлыҡтар, уларҙың яҙылышын үҙләштереү.

**Йәмле йәй етә (3 сәғәт)**

Йәй миҙгеленең үҙенсәлектәрен билдәләү. Һүҙ байлығын арттырыу, һөйләү һәм яҙыу телмәрен үҫтереү. Тәбиғәтте күҙәтеү, алған тәьҫораттар буйынса фекер алышыу. Был айҙарҙа уҙғарылған милли байрамдар менән таныштырыу, улар тураһында белгәндәрҙе һөйләү. Йәйге ял, хеҙмәт, ололарға ярҙам тураһында әҫәрҙәр уҡыу һәм әңгәмәләр үткәреү. 7-се класта үткәндәрҙе ҡабатлау, дөйөмләштереү.

**8-се класс**

**Мәктәпкә барабыҙ - 3 сәғәт**

Тема буйынса эҙмә-эҙлекле һөйләмдәр төҙөү, ҡыҫҡа ғына хикәйә төҙөргә өйрәнеү. Текст өҫтөндә эшләү,план төҙөү, план буйынса һөйләү. Мәктәп, класс торошо һ.б. хаҡында әңгәмәләр ойоштороу. Белем, китап тураһында мәҡәлдәр ҡуйоу. 5-6 класта үтелгәндәрҙе иҫкә төшөрөү. Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибен дөрөҫ урынлаштырыу. Өндәрҙе дөрөҫ әйтеү

**Көҙгө эштәр һәм көҙгө тәбиғәт - 5 сәғәт**

Кешеләрҙең көҙгө хеҙмәтен күҙәтеү. Темаға ҡағылышлы текстар уҡыу. Муллыҡ, хеҙмәт тураһында мәҡәл, әйтемдәр менән танышыу. Һынамыштар уҡыу. Маҡсаты буйынса һөйләм төрҙәрен, логик баҫымды өйрәнеү. Исем менән ҡылымды ҡабатлау.

**Өфө менән танышыу - 5 сәғәт**

